# Кәзә менән Һарыҡ

Башҡорт халыҡ әкиәте

http://goldina-myclas.ucoz.ru/

Маҡсат: балаларҙы башҡорт халыҡ ижады менән таныштырыу, әкиәттең эстәлеге аша ғәҙеллек,батырлыҡ,сабырлыҡ сифаттары тураһында төшөнсәләр биреү.

http://goldina-myclas.ucoz.ru/

Борон-борон заманда ҡарға – командир, һайыҫҡан- һалдат, турғай түрә булғанда, йәшәгән, ти әбей менән бабай. Булған, ти уларҙың Кәзә менән Һарығы. Әбей менән бабайҙың уларҙы ашатырға бесәндәре бөткән.Шунан һуң әбей икеһенә ҡапсыҡ биреп, бесән эҙләргә, сығарып ебәргән.



Бына КӘЗӘ МЕНӘН ҺАРЫҠ урман эсенән китеп баралар, ти.



Улар юлда бер бүре башы табып алалар,  уны  ҡапсыҡтарына һалып юлдарын дауам итәләр.



Күпмелер юл үткәс, уларға бер көтөү бүре осраған. Бүреләр бутҡа бешереп ултыралар икән. Бер Бүре: боғор- боғор бутҡа бешә ,ите юҡ ине , ите лә булды әле, - тигән, ти.



Кәзә лә аптырап ҡалмаған:
- Ики-ки-мики-ки, беҙҙең тоҡта бүре башы ун ике, - тип бүре башын ун ике тапҡыр сығарған да күрһәткән, сығарған да күрһәткән.
Бүреләр бынан бик ҡурҡҡандар. Бер бүре ҡарап торған да былай тигән: - Бутҡаның һыуы бөткән, һыуға барып киләйем әле тип, һыуға киткән.
Аҙыраҡ торғас, икенсе бүре: - Нишләп һаман килмәй икән ? – тигән булып, был буре лә табанын ялтыратҡан.



Шулай итеп, бөтә буре лә ҡасып бөткән.
Ә инде КӘЗӘ МЕНӘН ҺАРЫҠ , рәхәтләнеп бутҡаны ашап, әле булһа бергә донъя көтәләр, ти.

